

(1921 – 1981)

**Вәлиев Ярулла Носратулла улы** — башҡорт журналисы, яҙыусы, БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре

# Ярулла Носратулла улы Вәлиев

1921 йылдың 10 мартында Нуриман районы Бикмырҙа ауылында тыуған.



**Үҙ ауылында башланғыс, күрше Үктәйҙә ете йыллыҡ мәктәпте тамалағандан һуң Өфө ҡалаһындағы Баһау Нуриманов исемендәге педагогия рабфагында уҡый.**
**1940 йылда Өфөләге уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институты ҡарамағындағы педагогик курстарҙы тамамлай.**



1941-1942йылдарҙа «Еңеү юлында» (хәҙерге «Таң») гәзитендә яуаплы редактор вазифаһын башҡара
1944 йылда ВКП(б)-ның Бөрйән районы комитетының бүлек мөдире итеп тәғәйенләнә.
1946 йылда ВКП(б)-ың Башҡорт өлкә комитеты ҡарамағындағы бер йыллыҡ партия мәктәбендә белем ала. Шул уҡ йылда ситтән тороп К. А. Тимирязев исемендәге Башҡорт педагогия институтты тамамлай.
1946—1947 йылдарҙа «Большевик» (хәҙерге «Йүрүҙәнь») гәзитендә яуаплы редактор була.
1947 йылдан «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзитендә бүлек мөдире һәм әҙәби хеҙмәткәр вазифаһын алып бара. 1949 йылда «Ҡыҙыл таң» гәзитендә эшләй.
1957—1960 йылдарҙа «Совет Башҡортостаны» гәзите хеҙмәткәре була.
1960—1965 йылдарҙа «Һәнәк» журналында бүлек мөдире, ә 1966—1975 йылдарҙа «Совет Башҡортостаны» гәзитендә бүлек мөдире



Ярулла Вәлиев күп прозаиктар кеүек әҙәбиәткә шиғырҙар яҙып аяҡ баҫа.

1938—1941 йылдар арауығында республика ваҡытлы матбуғатында уның исем-шәрифтәре менән баҫылған шиғырҙарын йыш осратырға була.

1947 йылдан журналистикаға ныҡлап тотона. 1963 йылда Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә «Үҙебеҙҙең кеше» исемле тәүге хикәйәләр йыйынтығы баҫылып сыға

# Ярулла Валеевтың иҗади эшмәкәрлеге






**1965 йылда**
«Хәйерле иртә, Исмәғил!» повесы айырым баҫма булып сыға.
Әҫәр әҙәбиәт һөйөүселәр, бигерәк тә мәғариф хеҙмәткәрҙәре араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра.




Ғүмер дауам итә. - Өфө, Башҡ. китап нәшр., - 1968. - 214. б. – Йөкм.: Көслө ҡошсоҡ һин, сыйырсыҡ; Йәшнәп үтте йәшен; Күҙем йомһам, күҙ алдымда; Йылы ямғыр яуа һибәләп; Йәшәһен тормош!; Йөҙ, елкәнем!; Тамырҙарың тәрән һинең; Тыуған тупраҡ; Ғүмер дауам итә.










**1970 йылда — «Бөркөттәр оя ташламай» романы,**
**ә 1976 йылда «Һин минең берҙән берем» повесы донъя күрә. Әҙип әҫәрҙәренең төп геройҙары — ергә ереккән хеҙмәтсәндәр.**

Асанбаев Н. Ҡәләмдәшебеҙҙең һуңғы әҫәре / Н. Асанбаев, Ғ. Байбурин // Ағиҙел. – 1994. - № 3. – Б. 158.



# ҠӘЛӘМДӘШЕБЕҘҘЕҢ ҺУҢҒЫ ӘҪӘРЕ



*1972 йылда Ярулла Вәлиевтең «Бөркөттәр оя ташламай» исемле романы баҫылып сыҡҡайны. Уҡыусылар уны йылы ҡабул итте, әҙәби тәнҡит тә юғары баһаланы. Роман рус телендә лә донъя күрҙе.*

*Яҙыусы, күрәһең, дилогия ижад итеүҙе күҙ уңында тотҡан. Әлеге әҫәр — «Ағым уртаһында» — ошо романдың дауамы рәүешендә яҙылған.*

*Бигерәк тә шуныһы ҡыуандыра: әҫәрҙә ауыл хужалығын яңы үрҙәргә күтәреү буйынса һуңғы осорҙа илдә барған ҙур үҙгәрештәр тасуирлана. Кеше факторы, етәксе кадрҙарҙы нығытыу, коммунистарҙың авангардлыҡ роле, колхоздарҙың үҙҙәренә инициатива биреү, пландарҙы урындағы шарттарҙан сығып билдәләү, хужалыҡты махсуслаштырыу, тупраҡ үҙенсәлектәренән сығып ниндәй культуралар игеү, хеҙмәтсәндәр хаҡында хәстәрлек — бына шундай көнүҙәк мәсьәләләр күтәрелә. Бөгөнгө колхоз ауылының ҡатмарлы тормошон автор үҙенсәлекле характерҙар, тормошсан картиналар, фәһемле уйланыуҙар аша һүрәтләй. Былар бөтәһе лә, күрәһең, яҙыусының Бүздәктә оҙайлы ижади командировкала булыуының матур һөҙөмтәһелер. (Ул унда ике йылдан ашыу партия райкомында инструктор булып эшләп, материал туплап ҡайтты).*

*Ҡәләмдәшебеҙ дилогияның икенсе китабын тейәлләргә өлгөрмәне, үкенескә ҡаршы, арабыҙҙан ваҡытһыҙ китеп барҙы. Шулай ҙа яҙылған ҡәҙәрендә лә ниндәйҙер үҙенә күрә бөтөнлөк бар.*

**Н. Асанбаев,**
**Ғ. Байбурин**

Ярулла ВӘЛИЕВ

# АҒЫМ УРТАҺЫНДА

РОМАН*

## Беренсе киҫәк

Ҡариҙел хәрәкәткә килде: үҙен баҫып, ҡыҫып торған ҡыш ҡорғаның өҫтөнән алып ырғытты. Ыжғыр ҡыш буйына еңелмәҫ хаким итеп тойған ҡалын боҙ ҡатламы ыңғырашып аҡтарыла, онтала, ҡыйрала. Эре-эре боҙ киҫәктәре, гәйрәтле ағым ҡыҫымына сыҙай алмай, бер-береһенә ташлана, батыра, емерә.

Тышауынан ысҡынған арғымаҡтай, Ҡариҙел елкенеп елергә, атлығып алҡынланырға тотондо. Тәүәккәл ынтылып, Баймырҙа тәңгәлендәге бөгөлдә манара һымаҡ ҡайҡайып ултырған шөкәтһеҙ таш аша һикереп үтте. Үҙенең мәңгелегенә инанып, юл бирергә теләмәй ағымға ҡаршы күкрәк кireп ултырған таш, ярһыу тулҡындар аҫтында ҡалып, күҙҙән юғалды. Тирә-яҡ баҫыуҙарҙы, туғайҙарҙы иңләп-буйлап күңелен ҡандырғас, Ҡариҙел ярҙарына әйләнеп ҡайтҡанда инде ирәүән таштың эҙе лә юҡ ине. Ҡасандыр ул, ташҡын менән кипсәлеп килеп, яр буйы ҡомона ултырған булған, күрәһең. Төпкөл ағым, туҡтауһыҙ йыуа-йыуа, аҡрынлап нигеҙен ҡаҡшата килгән. Әле иһә түңкәргән дә үҙ юлынан алып ташлаған.

Таш тирәләй көнө-төнө ҡайнаған өйрөлтмәк тә баҫылды... «Ярҙы убылыуҙан һаҡлай был таш»,— тип һөрән һалыусылар ҙа шымды. Баҡтиһәң, һаҡҡа баҫҡан һалдаттарҙай теҙелешеп ултырған һырғый ҡарағайҙар һаҡлай икән яр буйын...

Ҡариҙел менән уның үҙәндәрендә көн иткән Көҙәй халҡы араһында ла бер оҡшашлыҡ бар кеүек: икеһе лә тыныс холоҡло, сабыр тәбиғәтле. Ҡырҡыу боролмаларҙа, юлға арҡыры төшкән ҡаршылыҡтарға тап килгәндә ажар елкенеп, талпынып-тулап ала торған ғәҙәттәре лә бар. Яҙмыштары ла уртаҡ һымаҡ...

### I

Иҙел ҡеүәте халыҡ гәйрәтен хәтерләтә...

Ҡыш тартышып-тырмашып, ыңғырашып сигенә. Көсөн күрһәтергә теләп, ел-дауыллап ала, бурандарын уйната. Ләкин уның көндәре барыбер һанаулы: ҡар башына ҡар етә, әсе елдәр уны тиҙләтә. Ҡояш күтәрелә барған һайын ҡыштың ҡөҙрәте кәмей. Көндөҙҙәрен тупылдатып тамсылар тама. Төндәрен ат күтәрерлек булып ятҡан ҡар юрғаны селтәрләнә-селтәрләнә йоҡара килә.

Һауала яҙ еҫе аңҡый. Көндәр йылыға тарта...

Киске һалҡын ҡыуартып өлгөргән ҡар селтәрҙәрен сыртлата баҫып, ҡарая төшкән урам юлынан Ҡыҙрас менән Гөлзифа өйөнә ҡарай атлағанда, Гөлйөҙөм үҙен ҡанатланған кеүек хис итә ине. Үткән көн у[illegible]

* Башы. Аҙағы киләһе һанда.

Ағым уртаһында: роман (ба
Ағиҙел. – 1994. - № 3. – Б. 15
174.

## «Кариҙел буйында калам...»

*(Ярулла Вәлиевтың тыуыуына 90 йыл)*



Мәғрур тауҙар араһынан ажарланып аҡҡан Ҡариҙел йылғаһы Нуриман районы киңлектәрендә һалмаҡланып, яҡын-тирәләге туғайҙарҙа бихисап күлдәр хасил итеп, Ағиҙелгә ыңғайлай. Ошо йылғаның һул яҡтағы бейек ярын һыулаған Бикмырҙа ауылында 1921 йылдың буранлы мартында Ярулла Носратулла улы Вәлиев – буласаҡ яҙыусы – донъяға килә.

Тыуған ауылында башланғыс, күрше Үктәйҙә ете йыллыҡ мәктәптә белем алғандан һуң, Өфө ҡалаһындағы Баһау Нуриманов исемендәге педагогия рабфагында уҡый. Һуңынан Ярулла Вәлиев Бөрйән районы Иҫке Собханғол урта мәктәбендә уҡытыусы, РОНО-ла инспектор, район «Еңеү юлы» гәзитендә яуаплы сәркәтип, мөхәррир булып эшләй. 1945 йылда өлкә партия мәктәбенә уҡырға инә, ситтән тороп Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлай.

Ярулла Вәлиев, бәғзе прозаиктар ише, башҡорт әҙәбиәтенә тәүҙә шиғырҙар яҙып аяҡ баҫа. 1938 – 1941 йылдар арауығында республиканың ваҡытлы матбуғатында уның исем-шәрифтәре менән баҫылған шиғырҙарын йыш осратырға була.

1947 йылдан журналистикаға ныҡлап тотона. 1963 йылда Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә «Үҙебеҙҙең кеше» исемле тәүге хикәйәләр йыйынтығы, 1965 йылда «Хәйерле иртә, Исмәғил!» повесы айырым баҫма булып сыға. Әҫәр әҙәбиәт һөйөүселәр, бигерәк тә мәғариф хеҙмәткәрҙәре араһында ҙур резонанс тыуҙыра. 1970 йылда – «Бөркөттәр оя ташламай» романы, ә 1976 йылда «Һин минең берҙән-берем» повесы донъя күрә.

Әҙип әҫәрҙәренең төп геройҙары – ергә ерекҡән хеҙмәтсәндәр. Уның бар ижады – Ҡариҙел туғайҙарында мөлдөрәшкән күлдәр кеүек, күңелдәрҙә урын алып, ер кешеһенә, саф мөхәббәткә дан йырлай.

Әхмәҙин ӘФТӘХ.

Әфтәх Ә. Кариҙел буйында калам: Ярулла Вәлиевтың тыуыуына 90 йыл / Әхмәҙин Әфтәх // Ағиҙел. – 2011. - № 3. – Б. 174.

*Ҡариҙел буйында ҡалам*
*Ҡариҙел буйҙары киң,*
*Күктәрҙең зәңгәрлеге,*
*Күктәрҙең зәңгәрлеге,*
*Сабый сафлығына тиң.*

*Ҡариҙелем һиндә ҡалам*
*Ер еткән ерем ошо.*
*Бөркөттәр оя ташламай,*
*Бөркөттәр оя ташламай,*
*Ә мин ҡаяның ҡошо...*

